**ЗАДАНИЯ**

**I тура дистанционной олимпиады по Башкирскому языку**

**для учащихся 5 - 8 классов (первый этап)**

1. *Яугир* һүҙенә фонетик анализ эшләгеҙ.
2. "*Протеза*" термины нимәне аңлата? Фекерегеҙҙе иҫбатлап миҫалдар килтерегеҙ.
3. Бирелгән текстан исем ҡылымдарҙы күсереп яҙығыҙ.

*Ҡаранай ҡалтыранған ҡулдары менән билендәге бысаҡты ҡынынан һурып сығара алмай яфаланды. Аяҡ аҫтында ҡарҙың ҡыҙғаныс шығырлауы, тирмә эсендә ҡатын-ҡыҙҙың сеңләп илашыуы, тынлыҡты боҙоп, арҡа буйын өшөтөп йүрмәләгән мәл ине. Бына шул тауыштарға керештән ысҡынған уҡтың зыңҡылдауы, кемдеңдер һиҫкәнеп ҡысҡырыуы өҫтәлде. Аҙнай ҙа, Ҡаранай ҙа Бөркөткә боролоп ҡараны: уҡ ҡыпсаҡтың ауыҙ эргәһенән ҡолаҡ төбөнә саҡлы яңағын тишеп, шунда батып ҡалғайны. Бөтә халыҡ аһ итте. Шау-шыу ҡупты ла тымды. Аҙнай бей, хәлһеҙләнеп, көрсигә ултырҙы* (Булат Рафиков).

4. Бирелгән ябай һөйләмдәрҙән сәбәп эйәрсән һөйләмле эйәртеүле ҡушма һөйләм төҙөп яҙығыҙ: *Артабан Урал буйына юл тотасағын әйтте. Ҡолғәли унан ҡалманы (Булат Рафиков).*
5. Түбәндәге текстың стилен билдәләгеҙ.

*Йәш дуҫтарым! Меңәр йылдар буйына Ер шарында Кешелек өсөн иң юғары идеал бераү – Кешегә хеҙмәт итеү: тыуған төйәгең өсөн йәнеңде фиҙа ҡылыу, прогресс, йәғни Кеше аңының үҫеше өсөн көрәш. Утыҙ мең йыл буйына Прометей бушҡа яфа сикмәгән – үҙ мәнфәғәте*

*өсөн түгел, Кешене утлы иткәне өсөн. Исемен мәңгеләштереү өсөн генә Джордано Бруно костерга бармаган һәм 19 йәшлек Александр Матросов та үлгәндән һуң данга лайык булыр өсөн дошман амбразураһын күкрәге менән капламаган. Барыһы ла Кеше өсөн!*

*Йәшәгеҙ, хеҙмәт итегеҙ, кешеләр менән короламаган мөнәсәбәттәрегеҙ өсөн, тамамларга өлгөрмәгән эштәрегеҙ өсөн, күрһәтелмәгән изгелек өсөн, татымаган мөхәббәт өсөн, әйтелмәгән рәхмәт өсөн үкенерлек булмаһын!* (М. Кәрим).

6. Тыныш билдәләрен ҡуйып, һөйләмде күсереп яҙығыҙ.

*Эш бөттө көлтә йыяһы гына калды*

7. Бирелгән һүҙҙәрҙе эйәлек килешкә ҡуйып яҙығыҙ:

*Петровск, Кузбасс, грипп, лагерь, декабрь*

8. Бирелгән һүҙҙәргә күплек ялғауын ҡушып яҙығыҙ:

*Артист, поезд, повесть, нерв, грамм.*

9. Текстағы һөйләмдәрҙең бәйләнеү төрөн асыҡлап яҙығыҙ: *Ел һиҙелеп һалкыная, һауа дымлана. Дауыл басылды. Донъя дәһшәтле тынлыкка сумды. Бына йәшен якында гына ялтлай, баш осонда тиерлек күк күкрәй. Ямгыр якыная.* (Ф. Исәнғолов)

10. Текстағы һөйләмдәр ниндәй синтаксик сара ярҙамында бәйләнгән: *Төн. Башкорт кыҙының тәңкәле еләне шикелле, күҙҙең яуын алып, йымылдап торган аяҙ күктә, алтын табактай, тулган ай йөҙә. Таллыкта һандугастар сутылдаша. Күләүектә тәлмәрйендәр бакылдаша. Оло Эйек йылгаһы үҙенең мәңге шат, шаян йырҙарын һандугас моңдарына мансып, кыуана-көлә өҙлөкһөҙ сылтырап ага ла ага* (З. Биишева).

11. Кеше нисә төрлө көлә ала? *Яуаптарыгыҙҙы яҙыгыҙ.*

12. Йомаҡты сисегеҙ: *Аяҡтары төп-төҙ генә, тәҙрәһе уның зәңгәр, һөйләп, йырлап ебәрә ул, төймәһен баҫһаң әгәр. Зәңгәр балаҫҡа ынйылар һибелгән, балаҫына ултырып булмай, ынйыларын алып булмай.*

13. Тыныш билдәһен ҡуйырға: *Быймам гына ҡышты маҡтай килә һаман ҡыш ҡыш тип.*

14. *Беҙҙә <u>ҡышлаусы</u> ҡоштарға ярҙам итегеҙ.* Аҫтына һыҙылған һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауын билдәләргә.

15. Мәҡәлде дауам итергә: *Ат ажарын йүгән тыя ала, ир намыҫын ...*

16. Түбәндәге үлсәү һүҙҙәре ниндәй арауыҡты белдерә:

*Аршын, ҡарыш, сажин.*

17. Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләргә:

*Шуныһы билдәле: кәкүктәр йөнтәҫ ҡарышлауыҡтарҙы, күбәләктәрҙе, төрлө ҡортттарҙы ашай* (Ғ. Ишбулатов).

18. Аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге булыуын билдәләргә: *Малайҙар, <u>ат менгәндәй</u>, йүгерешеп ҡайтып киттеләр* (Ж. Кейекбаев).

19. Һөйләмдәге ҡалын менән яҙылған һүҙгә тулы морфологик анализ яһарға: *Бошман туҙынды-туҙынды ла , ишек төбөндә башын эйеп торған Бөркөткә сығып китергә ишаралап,* ***ултырҙаштарынан*** *ситкә боролоп, бөтә кәүҙәһе менән алға-артҡа һелкенергә тотонды* (Булат Рафиков).

20. Түбәндәге һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһарға: *Ҡыш яҙғы илаҡка әүерелгән көндәрҙең береһендә, иртәнге намаҙ мәле үткәс, ауылдың ир-аты икешәрләп-өсәрләп Аҙнай бейҙең* яугир [ йаугир] *тирмәһе янына йыйыла башланы*(Булат Рафиков).